## *Һин илаһи талант эйәһе*

Ажарланып, мамык кар туҙҙырып,
Тулағанда ғинуар бураны,
Был ни ғәжәп әле, был ни ғәжәп,
Хистәремде ак бурандар түгел,
Ҡапыл серле моңдар сорнаны.
Зәйнәб апай, һинең тыуған көнөң
Хатта кышкы һалкын миҙгелдә,
Гүйә, йылы яҙҙар килтерҙе лә,
Сәскәләрҙең хуш еҫтәрен бөркөп,
Ҡош һайратты минең күңелдә.
Эй, кинәнеп, шашып шатланамын,
Әйтерһең дә, мин бер диуана…
Булһа булһын! Мәгәр шуныһы хак:
Әҙибәбеҙ, һинең байрамыңа
Бөтә Башкортостан кыуана!
Үҙ халкыңа кайнар һөйөү булып
Ҡояш йөрөй йөрәк түрендә,
Ана шуға ла бит шәфкәтлелек,
Мәрхәмәтлек нуры балкый төҫлө
Сал сәсеңдең һәр бер төгөндә!
Якты донъяларға яратылған
Һин - илаһи талант эйәһе,
Аҫыл талантыңдың тамырҙарын
Киҫер өсөн аҙмы хаслык кылды
Көнсөллөктөң хәтәр көйәһе!
Сәмле хеҙмәт менән күкрәп үтте
Йәшел яҙың, ап-ак кыштарың…
Тылсымлы йән өрөп, канат куйып,
Тормош киблаһына осорҙоң һин
Ижадыңдың сихри коштарын!
Мең хәүефтән, мең бәләнән курсып,
Туған телде, тыуған төйәкте,
Ҙур йөрәкле Ил әсәһе булып,
Оло мөхәббәттең канатында
Күтәрҙең һин тотош милләтте!
Заманыңдың моңон йырланың һин,
Сал тарихын яҙҙың быуаттың,
Мин инанам, матурлыкка әйҙәп,
Быуындарҙан – быуындарға күсер
Гәүһәрҙәре һинең ижадтың!
Алтындарҙан киммәт әҫәрҙәрең
Һәр беребеҙ өсөн коттор ул!
Һөйөклөбөҙ беҙҙең, Зәйнәб апай,
Урал тауҙай бай мираҫы булған
Һинең кеүек әҙибәләр хатта
Шәрек донъяһында юктыр ул!

Абдулхак Игебаев.

Башҡортостан Республикаһы
Бөрө районы муниципаль районының
Биләмә-ара китапхана системаһы
муниципаль бюджет мәҙәниәт учреждениеһы
Үҙәк биләмә-ара китапханаһы

# ХАЛКЫБЫҘҘЫҢ АРҘАКЛЫ ҠЫҘЫ



(1908 – 1996)

…Теләр инем, гранит кая булып,
Ер өҫтөнә кабат тыуырға.
Теләр инем йәшәү каршыһында
Сал башымды әйеп торорға.

Бөрө

Биишева (Бейешева) Зәйнәб Абдулла ҡыҙы – башҡорт яҙыусыһы, шағирә, драматург Башҡортостандың Күгәрсен районында тыуа. БАССР халыҡ яҙыусыһы (1990).

Зәйнәб Биишева – башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарынан беренсе булып шиғыр китаптарын донъяға сығарған, беренсе булып драма әҫәрҙәре яҙған, киң ҡоласлы, тәрән йөкмәткеле романдарҙан торған беренсе башҡорт трилогияһын ижад иткән ҙур һүҙ оҫтаһы.

Яҙыусының тәүге хикәйәһе 30-сы йылда донъя күрә. Ошонан һуң яҙыусы оло ижад һәм тормош юлы үтә, киң тематик диапазонлы, эпик тәбиғәтле әҙип булып формалаша. Башта балалар яҙыусыһы buларак танылa, романтик рухлы, яҡты хисле хикәйә һәм хикәйәттәр, шиғырҙар һәм ғибрәтле әкиәттәр яҙа. Һуңыраҡ «Дус булайыҡ», «Көн-һылыу»,(1949) «Уйҙар, уйҙар...» (1963) һымаҡ үткер фекерле, заманы өсөн ифрат актуаль повестар ижад итә.

Зәйнәб Биишева драматургия өлкәһендә лә уңышлы эшләй. «Тылсымлы ҡурай» (1957), «Нәҙер» (1966), «Зөлхизә» (1981) кеүек пьесалары халыҡсан рухы, халыҡ ижады традицияларына нигеҙләнеүе менән айырылып тора. Был драма әсәрҙәре республика театрҙары сәхнәләрендә күп тапҡыр ҡуйыла. «Салауаттың һуңғы монологы» поэмаһы (1984) – башҡорт милли геройы Салауат Юлаев шәхесен художестволы кәүҙәләндереүҙә шаҡтай ҙур ҡаҙаныш. «Кәмһетелгәндәр» (1958), «Уяныу» (1966), «Яҡтыға» (1969) романдары башҡорт әҙәбиәтендә иң яҡшы трилогияларҙың береһе. «Уяныу», «Яҡтыға» романдары һуңынан «Оло Эйек буйында» һәм «Емеш» исеме менән нәшер ителә. Был романдарҙа башҡорт халҡының 1917 революция һәм граждандар һуғышы осорондағы тормошо тасуирлана. Биишева әҫәрҙәре Рәсәй һәм донъя халыҡтарының күп кенә телдәренә тәржемә ителде.

Өс «Почет Билдәһе» ордены менән наградланған. Салауат Юлаев исемендәге Республика премияһы лауреаты (1968).

Мин белмәйем: ҡәнәғәтме Ерем?
Ҡәнәғәтме халҡым, дуҫтарым?
Тик ышанам: бушка йәшәне тип
Әйтә алмаҫ хатта дошманым!
Мин рухымдыңаҫыл хазинаһын,
Илем, һиңә биреп ҡалдырҙым.
Беләгемде тик бер һинең өсөн,
Һинең өсөн генә талдырҙым.

**Һайрар коштоң тынмаҫ моңомо ни ...**

Замандашым минең, башкорт кыҙы,
Ҡәләм тотоп сыктың ярышка.
Ижад емештәрең һокландырғыс,
Якшы даның китте алыҫка.
Ижад бәйгеһендә ал бирмәнең,
Була белдең якшы әсә лә
Хеҙмәтеңде ҙурлап, ихтирамлап,
Юлдарыңа сәскә сәсәләр…
Әҫәрҙәрең халык йөрәгенең
Иң түренән урын алалар,
Һайрар коштоң тынмаҫ моңомо ни,
Күңелдәрҙе яулай баралар.

Батыр – Вәлид, фронтовик-шағир.



